# Ҡауарҙы дөйөм белем биреү мәктәбенең 2 классуҡыусыһы Ҡунаҡбаева Элинаның ғилми-тикшеренеү эше



# Башҡорт телендә « әсә» һүҙе



**Эҙләнеү маҡсаты:** “Әсә” һүҙенең башҡорт телендә әһәмиәтен күрһәтеү.

**Бурыстары:**

«әсә» һүҙенең ҡулланылышын күҙәтеү;

«әсә» һүҙенең мәғәнәһен асыу;

был һүҙҙең фольклорҙа, әҙәби әҫәрҙәрҙә ҡулланылыуын күҙәтеү;

һүҙлек байлығын арттырыу.

**Эҙләнеү объекты:** **«**әсә» һүҙенең мәғәнәһе, төҙөлөшө, ҡулланылышы.

**Эҙләнеү субъекты:** башҡорт теле һүҙлектәре, әҙәби әҫәрҙәр

**Актуаллеге:** **«**әсә» һүҙенең башҡорт теле һәм әҙәбиәтендә тотҡан урынын һәм әһәмиәтен асыҡлау.

**Башҡорт теленең аңлатмалы** һүҙлегендә ике төрлө мәғәнәһе бирелә  :**әсә**

1.Балалы ҡатын. *Әсә булыу. Әсә йөрәге. Әсә һөтө. Бер әсә балалары.*

2. Күсмә мәғәнәлә. Ярҙам табырҙай  изге урынға әйтелә. **Урал-әсә, Ер-әсә әсәй**  һүҙе һүҙлектә:Баланың әсәһенә өндәшеү һүҙе. *Хуш бул, әсәй! .Һаумы, әсәй!*

**Башҡортса-русса һүҙлектә:** **әсә** мать, мама;



# *Мәҡәлдәр*

***Үҙ әсәң бауырһаҡ, үгәй инәң — һарымһаҡ.**

***Әсә янында бала етем булмай.**

***Әсә ҡуйыны тундан йылыраҡ.**

***Әсә йылыһы — ҡояш йылыһы.**

***Йәннәт әсәйҙәрҙең аяҡ аҫтында.**

*** Әсәһеҙ ғаилә һүнгән усаҡ .**

*** Әсәһен ҡәҙерләгән ҡәҙерле булыр.**

*** Ҡояш – яҡтылыҡ, әсәй – бәхетлек.**

***Әсәйгә бөтә балалар ҙа бер.**

***Әсә йөрәге ҡояштан да нығыраҡ йылыта.**

***Ҡош яҙға кыуана, бәпес – әсәйгә.**

*Һәр әсәгә үҙ балаһы яҡын.

* Әсәйҙән дә яҡын иптәш юҡ.

* Әсәм теле – сәсән теле.

* Бала өсөн әсәнең йөрәге, атаның беләге һыҙлар.

* Бала ҡәҙерен әсә белер, ил ҡәҙәрен ир белер.

*Тыуҙырған әсә түгел, үҫтергән – әсә.

* Әсәһе ғәҙәтһеҙ – улы әҙәпһеҙ.

* Әсәһе тирәккә менһә, ҡыҙы ботаҡҡа менә.

* Әсәһенә ҡарап, ҡыҙын ҡос,атаһына ҡарап, улын ҡос.

* Атаһыҙ етем – ярты етем, әсәһеҙ етем – гел етем.

***Әсәһе ҡыҙы ҡайғыһында, ҡыҙы үҙ ҡайғыһында.**

***Ҡыҙ ҡыҙлы булмаç, әсә ҡәҙерен белмәһә, ул уллы булмаç, ата ҡәҙерен белмәһә.**

***Әсәһе ниндәй – ҡыҙы шундай.**

***Ҡыҙы миңә яраһа, әсәһен бүре алһын.**

*** Әсә һөтө менән инмәгән тана һөтө менән инмәй.**

***Әсә булмай әсәйең ҡәҙерен белмәçһең.**

***Әсәһе күрер – ҡыҙы һөйләр, атаһы күрер – улы.**

***Атаһыҙ бала етем түгел,әсәһеҙ бала етем.**

*Атаһыҙ етем – туйҙа етем, әсәһеҙ етем – көн дә етем.

*Атаһыҙҙы ул итмә, әсәһеҙҙе ҡыҙ итмә.

*Атаһыҙға ат бирмә, әсәһеҙгә ҡыҙ бирмә.

*Бала – ата-әсәгә алтын бағана.

*Донъяла ата-әсәнән башҡа бар нимә лә табыла.

*Әсә ҡарғашы төшөр ине, инә һөтө ебәрмәй.

*Әсәнең һөтө – бал, баланың теле – бал.

*Әсәң үлһә – йылғаң короно, атаң үлһә – таянған тауың ауҙы.

*Әсәйең үгәй булһа, үҙ атайың да ят була.

*Әсәһе юрға булһа, ҡыҙы йөрөшлө була.

«Әсә»һүҙе картиналарҙа



# Иғтибарығыҙ өсөн рәхм